## Тема:Ҡушылған дәрес.Һүрәтләү саралары.

## “Ныҡлы ғаилә-ил терәге.”

(**Ғ. Сәләмдең тормош юлы һәм ижады.«Бала» поэмаһы буйынса**).

Уҡыу-методик комплект: Башҡорт теле.9-скласс.В.Ш.Псәнчин.

Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте. Хрестоматия.Урта мәктәптең 10-сы класы өсөн; Ғ.Хөсәйенов. Ғ.Сәләм”Бала”поэмаһы.

Планлаштырылған һөҙөмтәләр:

**Шәхси сифаттарҙы үҫтереү өлкәһендәге үҫеш**: уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү; белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарарға өйрәтеү; тел һәм әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһыныу,илһөйәрлек,арҙаҡлы шәхестәр менән ғорурланыу тойғоһо,уларға ҡарата ихтирам тәрбиәләү.

**Метапредмет өлкәһендәге үҫеш**: уҡыу процесында күҙәтергә,сағыштырырға,анализларға һәм һығымта яһарға өйрәтеү.

**Предмет өлкәһендәге үҫеш**: Ғ.Сәләмдең тормошона,ижад юлына күҙәтеү яһау,”Бала” поэмаһының йөкмәткеһен үҙләштереү, һүрәтләнгән ваҡиғалар аша проблемаларҙы асыҡлау,анализлау.Һүрәтләү сараларын ҡабатлау,”Бала”поэмаһында һүрәтләү сараларын тикшереү.

**Йыһазландырыу:** экран,слайдтар,китаптар күргәҙмәһе,ноутбуктар,эпиграф.

Дәрес барышы

| Уҡытыусы эшмәкәрлеге | Уҡыусы эшмәкәрлеге |
|---|---|
| I.Психологик комфорт булдырыу | |
| 1.Дәресте Г.Салә көйөнә, Р.Аҡъярова һүҙҙәренә яҙылған “Әссәләмәғәләйкүм! “ йырын тыңлау,ҡушылып йырлау менән башлау:<br>Таң ата ла ҡояш сыға,<br>Ҡояшты сәләмләй көн.<br>Һаумы, ҡояш !Һүнмәç усаҡ!<br>Әссәләмәғәләйкүм!<br>Тел асҡысы. иман биргән<br>Һөйөклө туған телем.<br>Үҙ телемдә һеҙгә сәләм<br>Әссәләмәғәләйкүм! | Экрандағы йыр һүҙҙәренә таянып йырлау. |
| 2.Хәйерле иртә,уҡыусылар! Бөгөн беҙҙә Республикабыҙҙың төрлө төбәктәренән килгән ҡунаҡтар.Әйҙәгеҙ ,улар менән иҫәнләшәйек! | -Хәйерле иртә! |
| 3.Шулай уҡ һәр берегеҙ күршегеҙгә уңыштар теләп,күтәренке кәйефтә дәресебеҙҙе башлайыҡ! | Уҡыусылар парта артындағы күршеһенең усына һуғып, уңыш теләй ала. |
| II.Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу | |
| 1.Уҡыу мәсьәләһе ҡуйыу өсөн ситуация тыуҙырыу:<br><br>Уҡыусылар,һеҙҙең фекерегеҙсә,дәрестә уңышлы эшмәкәрлек алып барыу өсөн нимәләр кәрәк?<br><br>Һеҙҙең кеүек уҡыусыларҙа | Ихтыяр көсө туплау,иғтибарҙы эшкә йүнәлтеү.<br><br>-Девиз,эпиграф... -- -----<br>-Ҡыйыулыҡ,берҙәмлек кеүек сифаттар...<br>•<br>• |

| | |
|---|---|
| ҡыйыулыҡ та,тырышлыҡ та етерлек!<br>Ә бына дәрестең темаһын бергәләп уйларға кәрәк буласаҡ.<br><br>- Вилдан Фәйзуллин башҡарыуында “Ҡолон” йыры яңғырай.Иғтибар экранға(экранда Рәми Ғариповтың шиғыр юлдары.Әсә һәм бала слайды).<br>- Балдан татлы бала әсәгә,<br>-Гөлдән наҙлы бала әсәгә,<br>-Ауыҙ һыуҡайы ла бал икән-<br>-Йөрәк ярып сыҡкан бала икән.<br>Кемдәрҙе ,нимәләрҙе күрәһегеҙ? | Йырҙы тыңлау,шиғырҙы уҡыу,слайдты ҡарау,уҡыу мәсьәләһен формалаштырып әйтеү.<br><br>-Вилдан Фәйзуллин башҡарыуында”Ҡолон”йырын тыңланыҡ.Әсә һәм бала слайды. |
| -Ошо шиғыр юлдарынан асҡыс һүҙҙе табығыҙ. | -Бала һүҙе. |
| -Асҡыс һүҙ менән бәйле нindәй уртаҡлыҡ бар? | -Асҡыс һүҙ менән бәйле Ғ.Сәләмдең”Бала”поэмаһы бар.Өйгә беҙгә уны хрестоматиянан уҡып килергә ҡушылғайны. |
| -Афарин.Ошо шиғыр юлдарында автор баланы нисек ҡылыҡһырлаған? | -Балдан татлы,гөлдән наҙлы,... |
| -Бала һүҙенә ниндәй һүҙҙәр ярҙамында ҡылыҡһырлама бирелә? | -Һүрәтләү саралары ярҙамында. |
| -Әйҙәгеҙ,һүрәтләү сараларын билдәләп үтәйек. | -Балдан татлы бала-сағыштырыу,<br>Гөлдән наҙлы-сағ.<br>Ауыҙ һыуҡайы ла бал икән-сағ.<br>Йөрәк ярып сыҡкан бала икән- |

| | |
|---|---|
| | йәнләнд. |
| -Дөрөҫ. Тимәк, бөгөнгө дәрестең темаһы нимә менән бәйле буласаҡ? | -Һүрәтләү саралары менән,минеңсә.<br>-Ғ.Сәләмдең”Бала”поэмаһы буйынсалыр,моғайын.<br>• |
| -Эпиграф итеп нимәне алырға була? | -Рәми Ғариповтың ошо шиғыр юлдарын. |
| -Нисек атала ошо әҫәр? | -Р.Ғариповтың “Бал-бала”шиғыры. |
| -Дәрескә ниндәй маҡсат ҡуйырһығыҙ?( һүрәтләү сараларын ҡабатлау,текста тикшереү,уларҙың әһәмиәтен билдәләү. “Бала” поэмаһының идея-тематик йөкмәткеһен асыу, поэманың ыңғай һәм кире геройҙарҙың идея-тематик , поэманың йөкмәкеһен анализлауҙа уҡыусыларға ярҙам күрһәтеү,бәйләнешле телмәр үҫтереү, ижади, логик һәм образлы фекерләү ҡәүәһен үҫтереү; бөгөнгө көндә лә актуаль яңғыраған проблемаларҙы асыҡлау нигеҙендә ғаилә ҡороуға, бала бағыуға дөрөҫ ҡараш тәрбиәләү, ғаилә йылыһына ынтылыш тәрбиәләү.) | 1. Һүрәтләү сараларын ҡабатлау,улар менән текста эш итеү, телмәрҙә ҡулланыу.<br>2.Ғ.Сәләмдең”Бала”поэмаһының йөкмәткеһен өйрәнеү.<br>3.Һөйләү телмәрен үҫтереү. |
| -Уҡыусылар,алдағы дәрестәрҙә беҙ ниндәй әҫәрҙәр өйрәнгән инек? | -Д.Юлтыйҙың”Ҡан” романын,Ғ.Хәйриҙең”Боролош”романын,М.Буранғол ижадын,Б.Бикбайҙың “Аҡсәскә”повесын. |

| | |
|---|---|
| -Һеҙ хәтергә төшөргән әҫәрҙәрҙең ҡайһыларында уртаҡ образдар,оҡшаш эпизодтар бар?<br><br>-Афарин.Уларҙы уҡығанда нимәләр аңлашылманы? Нимәләрҙе асыҡларға теләр инегеҙ?Ошо һорауҙарға яуаптар эҙләү - бөгөнгө дәресебеҙҙең бурыстары булып торор.<br><br>-Теманы,маҡсатты,бурыстарҙы билдәләнек,артабанғы эште нисек күҙаллайһығыҙ?<br><br>-Афарин,уҡыусылар! Ноутбуктарығыҙҙа һүрәтләү сараларын презентациялар нигеҙендә эшләргә бирелгән ине. **Нимә ул һүрәтләү саралары? Уларҙың функцияһы.**<br><br>Дәфтәрҙәрегеҙҙе асып,бөгөнгө дәрестең темаһын,артабанғы эш барышында үҙегеҙгә кәрәкле тип тапҡан мәғлүмәттәрҙе дәфтәрҙәрегеҙгә теркәп барырһығыҙ.<br>**Һүҙлек эше** таҡтала,аңлашылмаған һүҙҙәр булһа,интернетты ла ҡулланырға ла була..<br>Һүҙлек эше:<br>Дуғаҙаҡ ҡаҙ- түлһеҙ(балаһыҙ)ҡаҙ.<br>Мещан – үҙ файҙаһын ғына күреп,үҙе | -Б.Бикбайҙың”Аҡсәскә”повесында Әхмүш Ямаев образы Ғ.Сәләмдең”Бала”поэмаһында Әршитобразы оҡшаш,Нәғимә һәм Нәзирә,Зәйнәп образдарын сағыштырырға була.<br><br>-Өй эшен тикшерергә кәрәктер ти уйлайым,сөнки һүрәтләү саралары буйынса презентация эшләргә һәм Бала”поэмаһын уҡып килергә ҡушылған ине.”<br><br>(Теманы яҙып алыу. )<br>. - |

<table>
<tr><td>өсөн генә йәшәп,тар маҡсат менән йәшәгән кеше.</td><td></td></tr>
<tr><td colspan="2">V.Уҡыу мәсьәләһен хәл итеү</td></tr>
<tr><td>- Уҡыу мәсьәләһен хәл итеү өсөн үҙ аллы , парҙарҙа, төркөмдәрҙә эштәр тәҡдим итәм.Һәр пар бирелгән эш төрҙәре нигеҙендә поэманың йөкмәткеһе өçтөндә эшләй, һүрәтләү сараларын таба.<br><br>-Поэмала ниндәй проблемалар күтәрелгән?<br><br>- Поэманың төп геройҙары кемдәр?<br><br>1-се төркөмдәге парҙар:<br>- Поэма нимәне данлаған юлдар менән башланып китә? Текст буйынса эшләйбеҙ. Һүрәтләү сараларын табырға,дәфтәрегеҙгә теркәргә. 1-се парға-сағыштырыуҙар,2-сегә-метафоралар,3-сөгә-эпитеттар,4се-антитеза.5-се-синонимдар,6-сы-йәнләндереү,7-се гипербола,8-се-антонимдар.</td><td>- Иң төп проблема: ғаилә һәм әхлаҡ проблемалары.<br><br>-Зәйнәп, Сәйҙел, Нәзирә, Вәлишин, Әршит.<br><br>-Минеңсә, поэма йәшлек, йәштәр араһындағы мөхәббәт тойғоларының сафлығы, матурлығын данлаусы юлдар менән башланып китә. (Йәшлектең, йәштәр араһындағы мөхәббәт тойғоларының сафлығын, матурлығын, данлаусы юлдар менән башланып китә.)(хрест.191-се бит)<br>“Быйыл май үçтергән бер сәскә лә<br>Зәйнәп кеүек матур түгел дә,<br>Зәйнәп – Тәүге һөйөү яҙының<br>Гөлө булып шытты күңелдә.”<br><br>- “Зәйнәп врач булыр кеше,<br>Медтехникум бөтә бер йылдан,</td></tr>
</table>

| | |
|---|---|
| **Беренсе төркөм**:<br><br>1.Магнит тартҡан кеүек ҡайнар ирендәр – **сағыштырыу**<br>Поездар ҙа, яҙ шикелле – сағыштырыу<br>Бер сәскә лә, Зәйнәп кеүек матур түгел – сағыштырыу<br>2. Юғалттылар әйтер һүҙҙәрен – **йәнләндереү**<br>Электрҙар ниңә ҡарайҙар – йәнләндереү<br>Һауа теленде – йәнләндереү.<br>3.Уҡыу-белем-**синоним**<br>Икәү-Сәйҙел менән Зәйнәп-синон.<br>Һөйөү-мөхәббәт,һөйөү яҙы-син.<br>Ҡыҙыу-эҫе-син.<br>4.Һөйөү яҙы-**эпитет**<br>5.Ҡайнар ирендәр- **метафора**<br>Ҡанлы яҙ-**метафора**.**????**<br>6.Ҡан йөрөшө бер **бушатты,ҡыҫты** – (**антитеза**)һулышты.Яҙ **тулыша-бушатты-антитеза.Табылған** һүҙҙәр **төшөп ҡала-антитеза**.Йылдар **килер—** эҙе **юғалыр-антитеза.** | Улар беҙгә илде һәм үҙҙәрен<br>Төҙөүселәр булып сығырҙар.<br>Сәйҙел уҡыу бөтә, төҙөлөштәргә<br><br>Яңы белгес булып китер ул,<br>Зәйнәп Сәйҙел менән бергә торор,<br>Һәм уҡыуын дауам иттерер...”<br><br>- |
| -Кемдәрҙең мөхәббәте данлана һүң?(Сәйҙел менән Зәйнәптең).<br>Улар ниндәй йәштәр булып күҙ алдына баҫа?Характеристика биреп китәйек.Текст буйынса эш.(Хрест.**192-се бит**)Һүрәтләү саралары | (Улар тормошта янып йәшәүсе йәштәр. Сәйҙел төҙөлөш техникум әле генә тамамлаған, диплом алған,намыҫлы эшләй башлаған. Зәйнәп тә бер йылдан медицина техникумын тамамларға тейеш. Улар икеһе лә белемле, тейешле тәрбиә алған, эшһөйәр кешеләр. Йәш ғаилә төҙөгәндәр.)<br>“Шулай ҙа – мин<br>Семьялар ҡороуға ҡаршымын,<br>Бальзак кеүек, яңғыҙ ҡартайыуы Минеңсә ?Иң яҡшыһы.” |

| | |
|---|---|
| **2-се төркөмдәге парҙар:**<br><br>Ни өсөн Сәйҙел менән Зәйнәп араһында ҡаршылыҡ килеп тыуа,хатта уларҙың ғаиләһе тарҡалыуға тиклем барып етә?Хрест. буйынса эш.(**193-сө бит**) Зәйнәп менән Сәйҙел ниндәй ҡурҡыныс аҙым яһанылар?Кемдең йоғонтоһо нигеҙендә ошо аҙымға баралар?( **196-сы бит)**<br>**Икенсе төркөм**<br><br>Ап-аҡ шәлен ябынып – йәнләндереү<br>Май йәшәрә - йәнләндереү<br>Баҡса йәшәрә - йәнләндереү<br>Ишеп аҡҡан һыуҙай – сағыштырыу.мин<br>Бальзак кеүек-яңғыҙ ҡартайыуы-сағышт.<br>Етеҙ күҙҙәр – эпитет<br>Йәшлек яҙы – эпитет<br>Тоноҡ Иҙел – метафора**??????**<br>Айҙың нуры үткер – метафора.<br>Тулған ай-мет.Тар семьялар,ныҡлы семья.???Донъя тәме-эпитет.<br><br>**3-сө төркөмдәге парҙар:**<br>Сәйҙел менән Зәйнәпкә Әршиттең ысын йөҙөн асырға ниндәй ваҡиға ярҙам итә?(**200-сө бит**)(Әршиттән тыуған балаһын яңғыҙы тәрбиәләүсе Нәзирә менән осрашыу)<br>Балаларын һибеп йөрөйҙәр – метафора<br>Һалҡын процент – метафора<br>Әсәһе – блондинка, улы – брюнет – сағыштырыу<br>Айырылырға риза булдым, әммә аборт өсөн риза булманым – антитеза<br>Етем ҡалған икән – ләкин ул етем булманы – антитеза<br>Тормош ҡатмарлыраҡ романдарҙан – | <br><br>-Мещан Әршиттең зарарлы фәлсәфәһен тыңлап,ата-әсә булыу бәхетенән мәхрүм булалар. арҡаһында Сәйҙел яратҡан кәләше Зәйнәптән аборт яһаттыра,үҙ балаһын юҡ иттерә) |

| | |
|---|---|
| сағыштырыу<br>Миңә тиклем дә өйләнеп, ташлап киткән ике ҡатынын – антитеза<br>Донъяны аҙ күргән  ҡыҙ – сағыштырыу<br>Дуғаҙаҡ ҡаҙ – сағыштырыу<br>Ҙур ғәйеп – метафора<br>Оло хөрмәт-эш хаҡым ҙур-син.<br>Уйнай-көлә-син.Йылы хис-**эпитет.**<br><br>-Афарин,егеттәр!Шулай итеп,беҙ поэманың йөкмәткеһен үҙләштерҙек,һүрәтләү сараларын билдәләнек.**Хәҙер ял итеп алайыҡ.Күҙҙәргә гимнастика.**<br><br>Сәйҙел менән Зәйнәп ҙур хата яһанылар,ғаиләләре тарҡалыуға килеп етте.<br><br>-Әйҙәгеҙ,хәҙер **өс төркөм  дебат** нигеҙендә образдар менән эште дауам итә. Һәр төркөм  үҙ геройҙарын яҡларға,икенсе төркөмдәргә бирелгән геройҙарҙың хаталарын,кире сифаттарын,яңылыш аҙымдарын ғәйепләргә,тәнҡитләргә тейеш.<br><br>**1а)**Сәйҙелде ғәйепләп буламы?<br><br>**1б)**Зәйнәпте ғәйепләп буламы?Бөгөнгө көндә был проблема | <br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br><br>**1а)**Төрлө яуаптар:а)Сәйҙел төҙөүсе,изге намыҫлы хеҙмәт итеүсе,тейешле белем алған,эшһөйәр ир.Бәхетле һөйөү нигеҙендә матур ғаилә ҡора.Сәйҙелде яҡлайым.Һуң булһа ла ғәйебен таный,хатаһын төҙәтә.Баланыңғаилә нигеҙе икәнен аңлай.<br><br>**1б)**Сәйҙел Әршитлеккә бирелә,тәүҙә |

| | |
|---|---|
| бармы? | Зәйнәптән аборт яһаттыра,бала булмауына һылтанып,ҡатынын ташлап китә.Сәйҙел көсһөҙ ир тип уйлайым,аҙым һайын икеләнә,үҙ фекерендә ныҡлы түгел(а.Зәйнәп аборт яһатырға тейеш түгел ине,оло хата яһаны,балаһыҙ тормош булмай.Кеше һүҙенә ҡарап бәхетһеҙлеккә осраны,балаһы юҡ,сөнки аборт яһатты.Аборттан һуң күпселек ҡатын-ҡыҙҙарҡабат бала таба алмай.Автор уны туғаҙаҡ ҡаҙ менән сағыштыра.Ире өгөтләһә лә ,үҙенең фекере,аҡылы булырға тейеш ине.<br>б.Зәйнәп тә үҙ хатаһын аңланы.Тормошта төрлө хәлдәр була.Кеше хаталар аша йәшәргә өйрәнә.) |
| **2**)Кем ул Әршит?Әршиттәр бөгөн бармы? | **2)а)**Иң ғәйепле кеше Әршит.Шуға ла уны хөкөмгә тарттырғандар.Сит ғаиләләргә үҙенең яңылыш фекере менән йоғонто яһай,ҙур гонаһ алды,кешеләргә күп ғазап,бәхетһеҙлек килтерҙе.<br>б)Минеңсә,бында Әршиттең бер ғәйебе лә юҡ.Сәйҙел менән Зәйнәп быңдай йоғонтоға бирелергә тейеш түгел ине.Уларға был һынау булды.Минең уйлауымса,уларҙың мөхәббәте ныҡлы булмаған.<br>в)Әршит-мөхәббәттәре тотороҡһоҙ парҙарҙы һынаусы ,уларҙы юҡ итеүсе.Бәхетһеҙ парҙар йәмғиәткә файҙа килтерә алмай.<br>г) Әршит- мещан ҡарашлы кеше,йәмғиәттә үҙ урынын таба алмаған зарарлы бәндә.Һәр ерҙә ғаилә ҡора ,балаларын ташлай,төрлө ерҙә ялған фекер,ҡотҡо тарата.<br>д)Үкенескә ҡаршы,беҙҙең тормошта Әршиттәр күпселекте тәшкил итә.Ғаилә |

| | |
|---|---|
| | тормошона етди ҡарамаусылар,намыҫ,кешелеклелек сифаттарын юғалтҡандар.<br> е)Бала ата-әсәле ғаиләлә үҫергә тейеш.Хәҙерге көндә ауылдарҙа һәм ҡалаларҙа тормоштоң кире күренештәре күҙгә ташлана: етемдәр һанының артыуы,үҫмерҙәр араһында суицид осраҡтары,наркомания,эскелек,төрлө ауырыуҙарҙың күбәйеүе,секталарға юлығыу,йәштәр араһында бәйһеҙлек,иҫерткес ароматтар ҡулланыу. |
| **3)Вәлишин менән Нәзирә образдарының йөгө ниҙә?Нәзирә менән Зәйнәпте сағыштырырға,ҡайһы образ көслөрәк,һеҙҙеңсә,ни өсөн?**<br><br>- | **3)а)**Сәйҙел менән Зәйнәп үҙҙәренең хаталанғандарын аңлайҙар,үҙ хаталарын төҙәтеү өсөн Вәлишин менән Нәзирәнән этәргес көс алалар.<br>б)Вәлишин,Нәзирә образында ғаилә мәшәҡәттәре менән хәлһеҙләнгән,бала ҡарап йонсоған кешеләрҙе күрәбеҙ.<br>в)Юҡ,был яңылыш ҡараш.Улар үҙ балаларын тәрбиәләүгә бик яуаплы ҡарайҙар.Ваҡыт үтеү менән,Вәлишин,Нәзирә тәрбиәләгән балалар тыуған илдең лайыҡлы кешеләре булып үҫеп етерҙәр.Ныҡлы ғаилә- ил терәге.<br>г)Бала тәрбиәләп тә,эштә лә өлгөргән намыҫлы кешеләр улар.<br>д)Мин дә шулай уйлайым:бала тәрбиәләмәгән,бала тыуҙырмаған ғаиләләр яңғыҙлыҡҡа,бәхетһеҙ ҡартлыҡҡа дусар булалар.<br><br>(Уҡыусыларҙың яуаптары) |

<table>
<tr>
<td>Ә хәҙер алты эшләпә алымы ярҙамында эш.  Әҫәр беҙҙе нимәгә өйрәтә?Автор нимә әйтергә теләгән? Әҫәрҙән үҙеңә нимә алыр инең?<br><br>








</td>
<td>Бер уҡыусы эпиграфты уҡый.<br>(Уҡыусыларҙың яуаптары)</td>
</tr>
</table>

| | |
|---|---|
| <br><br><br>Уҡыусылар,дәресебеҙ аҙағына ла яҡынлашты.<br>Эпиграфҡа кире әйләнеп ҡайтайыҡ.<br>Бөгөн дәрестә ниндәй темаға һөйләшеү алып барҙыҡ?<br>Дәрескә ҡуйылған проблемаларҙы асыҡлай алдыҡмы?Үҙегеҙ өсөн ниндәй яңылыҡ алдығыҙ?Дәрестә алған белемем киләсәктә кәрәк буласаҡмы? | |

| | |
|---|---|
| | |
| | |
| | |
| VIII.Рефлексив анализ. | |
| Ғаилә һүҙен ҡулланып,бергәләп синквейн төҙөйөк..<br><br>Уҡыусылар,алдығыҙҙа ятҡан төҫлө карточкалар ярҙамында ғаилә тормошон сағылдырығыҙ һәм аңлатығыҙ:<br><br>“Бала”поэмаһында<br>Бөгөнгө көндә...<br>Киләсәктә...<br><br>Рефлексия:<br>1.Нимә белә инем...<br>2.Ниндәй яңылыҡ белдем...<br>3.Нимә белергә теләйем...<br>4 | Синквейн:<br>Ғаилә<br>Татыу,ныҡлы<br>Һоҡландыра,йәшәтә,ғорурландыра<br>Маяҡ(Терәк) |
| IX.Өйгә эш биреү | |
| - Өйгә эшкә ғаилә темаһына проект эшләргә.<br>1.Үҙ хаталарын аңлай алыуҙары.Бер-береһен ғәфү итә алыуҙары.Хеҙмәттең йәштәргә роле.Балаға булған мөхәббәт.Башҡа ғаиләләрҙең йоғонтоһо.)<br>2. (Мәктәп,ғаиләләрҙә тәрбиә кимәлен күтәреү.Балаларҙың ялын файҙалы итеп ойоштороу.Йәш ғаиләләргә ярҙам күрһәтеү.Балаларҙың һаулығын | **1-се төркөм:”Бала” поэмаһында йәш ғаилә проблемаларының хәл ителеше**.(<br><br><br>**2-се төркөм:Бөгөнгө йәш ғаилә проблемаларының хәл ителеше.** |

| | |
|---|---|
| ҡайғыртыу.Дәүләт кимәлендә закондар ҡабул итеү)<br>3. )(Ғаилә тәрбиәһе.Йәмғиәттең йоғонтоһо.Рух көсө.Йәшәү мәғәнәһен дөрөҫ аңлау.Тормошта үҙ урыныңды табыу.Яҡты киләсәккә ынтылыу,ышаныу.Ихтыяр көсөң булыу.Йәштәргә матди ярҙам күрһәтеү.) | **3-сө төркөм:Бөгөнгө йәш ғаиләне һаҡлау(милли проект**<br><br>Уҡытыусының аңлатҡанын иғтибар менән тыңлау,яҙып алыу. |
| Х.Дәрестәге эшмәкәрлекте баһалау | |
| Баланы үҙ эшен баһалауҙы ойоштороу.<br>Уҡытыусы дәрестә ҡатнашҡан һәр уҡыусыға баһаны ни өсөн ҡуйғанын аңлата. | Эш дәфтәренә шкала,диаграмма.смайлдар һ. б. ҡулланып, эшеңә баһа ҡуйыуҙы ойоштороп була. |
| ХI.Йомғаҡлау | |
| -Афарин,егеттәр!Фекерҙәрегеҙ менән килешәм.Тормош бик ҡатмарлы,ул кешеләр алдына төрлө һынауҙар ҡуя.Бөтә кешеләр ҙә был һынауҙарҙы еңеп сыға алмауҙары бар.Һеҙ фәһемле,аҡыллы фекерҙәр әйттегеҙ.Киләсәктә бындай проблемалар һеҙҙең өсөн ят булмаясаҡ,һеҙ улар менән осрашасаҡһығыҙ.Барығыҙға ла мәктәпте уңышлы тамамлап,юғары уҡыу йорттарында тейешле белем алып,яҡшы һөнәрҙәргә эйә булығыҙ.Терәк булырҙай ныҡлы ғаиләләр ҡороп,аҡыллы балалар | |

| | |
|---|---|
| үҫтерергә насип булһын.Ныҡлы ғаилә-ил терәге. | |